# ЙЫРТЫЛҒАН УКАЗ

Һуғыштан ҡайтҡас та, мин ҡалала күп тормай, ауылға киттем. Ауылда йорт-ер, туған-тумасалар булмаһа ла, әллә ниңә ҡайтҡы килде инде шунда. Дүрт йыл эсендә ауыл күп кенә үҙгәргән. Ауыл ситендәге күп йорттарҙың урынында аҡ мөрйәләр генә тырпайып ҡалғандар. Урамдарҙа күберәк ҡарт-ҡоро, ҡарсыҡ-ҡорсоҡтар, ҡулһыҙҙар, һуҡырҙар, ағас таяҡлы инвалидтар ғына осрайҙар. Баштан кискән ауыр ҡайғы — балалар, аталар, туғандарҙы юғалтыу хәсрәте кешеләрҙе бөкөрәйткән. Беҙ киткәндә, типһә тимер өҙөрлөк кешеләрҙең йөҙҙәре тәрән йыйырсыҡтар менән һырланғандар. Шат, уйнаҡ йөҙҙө әле лә булһа бер нисек тә үҙгәрмәгән муллалар, байҙар, һалдатҡа китеп үлгән ире өсөн пенсия алып «типтереп ятҡан» ҡайһы бер һалдаткаларҙа ғына күрергә була.

Мин Хөсни әбейгә төштөм. Ҡайтыу менән үк күрше-күлән, ағай-эне йыйылды. Барыһының да йөҙҙәрендә үткән дүрт йыл эсендә ҡайғырылған ҡайғыларҙың, түгелгән ҡайнар йәштәрҙең эҙҙәре ҡалған кеүек, һәр ҡайһыһы үҙенекен һораша.

— Ғариф балам, минең Камалетдинымды осратманыңмы? Өсөнсө йыл «ярмандар менән һуғышабыҙ, йортто һаҡлағыҙ, алла ризыҡты өҙмәһә, ҡайтырбыҙ әле» тип хат яҙғайны. Ул аллаһын да белмәйем инде — ҡылмаған ғибәҙәт тә ҡалманы, уҡымаған доғам ҡалманы — барыбер улдарымды ҡайтарманы. Унын барлығына ла шикләнә башланым инде.

— Тәүбә тиген, әбей!  Яңылышаһыңдыр!..

— Нисек һуң, балаҡай, һуғыштар бөтөр төҫләмө? Бик йәнгә тейҙе инде!

Кемдер минең өсөн яуап ҡайтарҙы:

— Бөтөргә таба ғына булһа ярар ине инде! Ҡайта башланылар бит. Ана әле күпер төбө Хәйрулланың да малайы ҡайтҡан, «һуғыш бөтәсәк,— ти.— Бәлшәүник тигән халыҡ власты ҡулға ала»,— ти.

— Һин дә бәлшәүник түгелме, улым?..

Кис менән халыҡ таралып бөткәс, Хөсни әбей ауыл хәлдәрен һөйләп алды. Аҙаҡтан Заир муллалар тураһында һөйләп китте.

— Беләһең инде донъяның эштәрен, балаҡай. Был Заир мулланы әйтәм әле. Малайы, ҡалалағы нәсәлниктәргә аҡса биреп, һалдаттан ҡалды ла теттереп ҡыҙыл мал менән һатыу итә. Хәҙер инде эштән сығып байынылар. Әй-й алла!.. Уларҙа аҫырау ҡыҙ булып торған Зәйнәпте беләһең бит? — Белмәй тағы. Дуҫ булып та йөрөгәнһегеҙ буғай. Шул бит һыуға төшөп үлде, балаҡайым!..

Мин Зәйнәп тураһында һорарға ҡыйыуһыҙланып ҡына ултыра инем. Был хәбәр йөрәккә һалҡын һыу ҡойған кеүек булды. Зәйнәптең матур алһыу йөҙө, ҡара оҙон сәстәре, йылдам, сибәр кәүҙәһе, йәш ҡыҙҙарға ғына хас булған яғымлы нескә тауыш менән: «Яратам шул һине, Ғариф ағай!..» тип, һуңғы тапҡыр ҡосаҡлап, үбеп ҡалыуын иҫкә алыу минең уйҙарҙы үткәндәргә тарттылар.

— Үлде шул, меҫкен бала!—ти әбей. Уның ҡарт тауышы ҡалтырай. Күҙҙәренә тулған йәштәр хәҙер атылып сығырға торалар.— Заир мулла үҙе көслəгән дә, ҡорһағы беленә башлағас, ҡыуып сығарған. Ғәрлегенән ҡайҙа барырға белмәгәндер инде, бисараҡайым! Атаһы-әсәһе лә юҡ ине шул! Әй, донъялар!..

Әбейҙең һүҙҙәре миңә баҙҙан һөйләгән кеүек ишетеләләр, һыуға төшөп үлгән Зәйнәптең миңә булған саф мөхәббәте, үҙемдең шул ваҡытта Заир муллала ялсы булып торғанда күргән ғазаптар аша йөрәктә уҫал үс ҡайнай, хәҙер бына барып Заир мулланы быуып ташлағыһы килә.

Зәйнәп, мин һалдатҡа китер алдынан, уға аҫыраулыҡҡа ингәйне. Эштән бушаған саҡтарҙа, йәйге айлы төндәрҙә, йоҡо ҡалдырып, беҙ Зәйнәп менән йылға буйындағы туғайға сығып китә торғайныҡ. Шул саҡта уҡ, аулаҡ тура килгәндә, мулланың ҡосаҡларға аҙапланғанын һөйләй торғайны. Бәләкәй бала кеүек, минең ҡуйынға инеп һыйына ла:

— Ни эшләрбеҙ һуң, Ғариф, ә? — Тулған ай яҡтыһында мин уның күҙҙәренә ҡарап:

— Аҙ ғына рәтләнәйек тә, үҙебеҙ башҡа тора башларбыҙ,— тим.

Ләкин һуғыш сығып китеүе беҙҙең тәмле хыялдарҙы бүлде, һуғышҡа киткәндә, мулла миңә тейешле эш хаҡын да бирмәне.

— Ҡайтҡас, алырһың әле, унда аҡса ниңә кәрәк, ҡаҙна ҡарай бит...

Әбей һаман һөйләй:

— Шунда уҡ оноттолар меҫкен баланы. Мулланан ҡорһағы булғаны ла ярты йылдан һуң ғына беленде...

Икенсе көндө күпер төбө Хәйрулла ағай малайы Сафи янына киттем. Ул Герман фронтынан йөрөп ҡайтҡан икән. Үҙебеҙҙең баштан үткәндәрҙе һөйләштек. Ул батша төшөрөлгән ваҡытты һөйләп алды:

— Ҡайһы бер офицерҙар үҙҙәре үк погондарын өҙгөләп ташланылар. Үҙҙәрен атҡандары ла булды. Иванов тигән бер полковник бар ине. Ну уҫал ине, собака. Әллә нисә һалдаттың башына етте. Беҙҙең полктың һалдат комитеты уға һөйләшергә барғас, янына ебәрмәгән. Тегеләр көсләп ингәндәр. Наганындағы алты пуляһын беҙҙекеләргә ебәргән дә етенсеһен үҙенең маңлайына атҡан. Бер һалдат үлде, икенсеһе ранен булды.

Шулай һөйләшеп ултырғанда, мөрйә сығарыусы Ғата ағай килеп инде. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡандан һуң, Заир мулланан зарланырға тотондо.

Йәй буйына бисәм менән икәүләп ат урынына эшләнек. Мал өйөндә быҙауҙар араһында торҙоҡ. Йүнле һүҙ ишеттермәне. Үҙем күрше ауылға мөрйә сығарырға киткәс, бер төндө, етмәһә, бисәгә йәбешергә уйлаған да, бисә бумала менән ҡыуып сығарған. Бына дуңғыҙ нәмә! Сыҡҡан саҡта шуның асыуынандыр инде,— эш хаҡының яртыһын алып ҡалды. Быйыл ғына алған бик яҡшы бер ломым бар ине — бирмәне бит шуны! «Һинеке түгел», ти. «Мулла ағай, мин әйтәм, яңылышаһың, тим, юҡҡа гөнаһҡа батма, тим».—«Юҡ, ти, күп һөйләшмә, ти. Әтеү, ти, типкеләп сығарырмын»,—ти.

Мулланан зарланыусылар күп булды. Староста менән һөйләштек тә, уны ауыл йыйынына саҡырмаҡсы булдыҡ.

Ауыл араһында хәбәр таралды. «Чурай ауылдары большевиктарға ҡаршы ҡуҙғалалар икән. Заир мулла мәсеттә һөйләгән. «Бәлшәүниктәр мәсеттәрҙе бөтөрәләр, ти, ҡатын-ҡыҙҙарҙы уртаҡ яһайҙар, ти. Ике туны булһа, береһен хәйерсегә бирәләр», ти.

Ауыл сходы тиҙ йыйылды. Ҡарауыл өйөнөң туңған ишеге шағырлап асыла ла, һыуыҡ пар менән бергә ҡаптырлаҡ тун, сәкмән, шығырҙап торған сабата, һирәгерәк, төлкө тамаҡ тун кейгән халыҡтар шығырым булып өйгә тулалар. Тыштағы томанлы һыуыҡ эскә йүгерә. Беҙҙең менән иҫәнләшәләр, һуғыш тураһында һорашалар. Былар барыһы ла былай ғына төҫлө. Бөтә кеше, бына хәҙер көтөлмәгән бер эш булыр төҫлө, бер- береһенә, унан Сафи менән беҙгә ҡарап, сходтың башланыуын көтәләр. Халыҡ араһында Заир мулланың уң ҡулы — Фәтхетдин дә күренә. Улар Ноғман мәзин менән быш-быш нәмәлер тураһында ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа һөйләшәләр.

Беҙ Сафи менән белгәнебеҙ тиклем большевиктар тураһында, уларҙың беҙҙең яҡлы булыуҙары, һуғышты бөтөрөргә теләүселәрҙең большевиктар булыуы тураһында һөйләнек, шунда кемдәрҙер:

— Былар үҙҙәре большевиктар икән!

— Хәйерселәр шайкаһы!

— Тотоп алырға, Чурайға ебәрергә!—тип ҡысҡырып ебәрҙеләр. Ләкин өҫтәл янына баҫҡан ярлы-ябағай бер нисәһе бергәләп өйҙө яңғыраттылар.

— Етер, күп ҡысҡырынмағыҙ! Быға тиклем бөтә ауылды ҡулығыҙҙа тотҡанығыҙ ҙа етерлек булды инде!..

Күптән түгел генә һуғыштан һул ҡулын өҙҙөрөп ҡайтҡан тимерсе Шәүәли ағай үҙенең янында ғына ҡысҡырған һатыусы Фәттәйгә ҙур суҡмар кеүек йоҙроғон күрһәтеп:

— Яп ауыҙыңды, ҡарун! — тине. Уның ҙур оҙон кәүҙәһе, киң яурыны менән, бөтә кешенән айырылып тора. Күҙҙәре уҫал итеп Фәттәйгә ҡарағандар.

— Ҡайҙа, саҡыртығыҙ Заир мулланы! Ул большевиктарға ҡаршы халыҡты ҡотортоп йөрөй ине! Уйнашсының кәрәген бирергә кәрәк!..

Халыҡ араһында шау-шыу китте. Ҡарауыл өйөнөң эсе дауыл алдынан һаңғырау гөрләүгә менән шаулаған урман кеүек. Ҡайһы саҡ тауыштар күтәрелеп китәләр ҙә, кешеләр бер-береһенә үҙҙәренең башына төшкән ҡайғылар, мыҫҡыл ителеүҙәр тураһында ҡысҡыралар. Күптәнге асыуҙарҙы килтереп сығаралар.

– Етерлек һимерҙе инде! Майына һыйышмай!..

— Муллалар барыһы ла  шулай улар!..

— Минең ҡатынға ла ҡул һалған ул!..

— Аҫырау ҡыҙын көсләгән кеше...

— Малайы минең еремде баҫып һөргәйне!.. Мөрйә сығарыусы Ғата ағайҙың да тауышы ишетелеп ҡала.

— Минең ломымды алып ҡалды, эш хаҡымды бирмәне!..

Ҡайһы саҡта шау-шыу түбәнәйә, бер-береһенең: «Ҡарттар!» — тип башлауы менән, тауыштар, тулҡынланып, һирәгәйәләр:

— Ҡарттар, йөҙгә күп ҡыҙыллыҡ килтерҙе инде, указын алырға кәрәк!

— Указын алырға, ҡыуырға кәрәк!..

Заир мулланы өҫтәл янына килтереп баҫтырҙылар. Ул бер еләндән генә килгән. Уң ҡулын елән кеҫәһенә тығып тора. Үҙе ҡалтырана. Староста Шәйбәк һөйләй:

— Бына, мулла, һинең өҫтөңдән шундай-шундай жалоба бар... Ни тиһең?

Бөтә халыҡтың күҙе муллала. Ул нәмәлер әйтергә теләп ауыҙын асҡайны, халыҡтың шаулауы һөйләргә ирек бирмәне.

— Һөйләмә,  нәмә әйтереңде беләбеҙ!..

— Давай указыңды!..

Мин урынымдан тороп:

— Ағайҙар, бындай ҡанескес кешеләрҙе үҙебеҙҙең  аранан ҡыуырға кәрәк! Муллалар барыһы ла бер сыбыҡ менән ҡыуылған...— тип һөйләргә генә башлағайным, мулла кеҫәһенән револьвер сығарҙы ла, миңә төҙәне, шунда уҡ бер нисә көслө ҡул уның револьверлы ҡулын түбәгә күтәрҙеләр.

Револьвер атылып китте. Халыҡ ҡыҙғандан ҡыҙҙы, йоҙроҡтарын күтәреп мулла өҫтөнә ташландылар. Ләкин туҡмарға ирек бирмәнек. Уны типкеләп урамға сығарып ташланылар.

Бер нисә кеше мулланың, өйөнә барып, указын алып килделәр.

Сафи: «Иртәгә волосҡа барам, алып барырмын», тине лә, указды үҙенә алды. Бер аҙ уйлап торҙо ла: «Унда нишләтерҙәр уны, йәмәғәт! Беҙгә кәрәкмәй бит был!» тип, халыҡҡа ҡараны. Тимерсе Шәүәли таҙа ҡулын һелтәп:

— Знамы кәрәкмәй, йыртып ташла! — тине.

Йыртылған указдың ваҡ киҫәктәре, ҡарауыл өйөнөң бысраҡҡа ҡатып бөткән иҙәненә осоп таралдылар. Кемдер:

— Капут указ! — тине. Староста Шәйбәк, мулланан алынған револьверҙы тотоп:

— Мин быны ҡайҙа ҡуяйым инде? — тип һораны. Сафи револьверҙы алып кеҫәһенә тыҡты һәм йылмайып:

— Кәрәк булыр әле...— тине.

Иртәгеһен беҙ унын менән ҡалаға ҡыҙыл гвардияға яҙылырға киттек.